## Рус мәктәбенең 9-сы класы өсөн контроль диктант текстары

### 1-се вариант

Эйе, тыуған ауыл кемдең йөрәгенә дәрт өçтәмәй ҙә кемгә илһам бирмәй! Ситтә оҙағыраҡ йөрөп ҡайтҡан кеше быны бигерәк тә ныҡ һиҙә.Ауылдың йәнле тарихы булған ҡарттврҙы,ең һыҙғанып эшләп йөрөгән ағайҙарҙы,апайҙарҙы һәм ҡорҙаштаорҙы , яңыраҡ ҡына урамда сәкән һуғып йөрөгән , хәҙер инде буйға еткән ҡустыларҙы ,күҙҙәрендә серле осҡондар һикергәләй башлаған ҡыҙҙарҙы осратаһың,улар менән һөйләшәһең дә шундай шәп ауылдаштарың булыуға ғорурланаһың.

Ә һуң йәй көндәре Ҡыраз буйҙарындағы сиҙәменә бер ятып аунауың йә күҙ йәшендәй саф,теш ҡамаштытырлыҡ һалҡын һыулы йылғаһына бер сумып сығыуың ни тора! Арыу-талыуҙарыңды ҡул менән һыпырып алалармы ни: унан һуң тағы баш күтәрмәй эшләге ,шул эшең менән дыу килтереп донъя көткән ауылдаштарыңды ҡыуандырғы килеп китә. (Н.Мусин) (109 һүҙ)

### 2-се вариант

### Яралы ҡайын.

Аҡ күлдәкле зифа аҡ ҡайынҡай! Уның бәрхәт кеүек йомшаҡ йәшел япраҡтарын иркәләргә, наҙларға ҡулдарым үҙенән-үҙе үреләләр. Әкрен генә иçкән яҙғы ел, минең уйҙарымды белгән кеүек, уның ботаҡтарын йомшаҡ ҡына һыйпап үтә. Япраҡтар үҙ-ара бышылдашып ҡына ниҙер һөйләшәләр. Туҡта! Ҡолағыма “мин яралы,мин яралы...”тигән үкһеүгә тартым бышылдау сағыла. Ә күҙҙәрем ҡайындың олоно буйлап аҡҡан күҙ йәштәренә бағалар. Кемдең яуыз ҡулдары уны сапҡылап, һутын ағыҙып киткән. Ә ҡайынға бик ауыр. Һутһыҙ йәшәүҙең ни шатлығы һуң? Ирекһеҙҙән, һуғыш яланында яраланған һалдатты күҙ алдына килтерәм. Ул ыңғыраша, ә яраһынан туҡтауһыҙ ҡан аға, күҙҙәре әрнеү ҡатыш йәштәр менән тулған. Бына ҡыҙыл тәреле таçма таҡҡан санитапр ҡыҙ ҙа килеп етер... Ә ҡайынға! Яралы ҡайынға кем ярҙам итер? Уның әрнеүле күҙ йәштәрен кем күрер? (Г.Ғөбәйҙәуллина) (120 һүҙ)

В.Ш. Псәнчин “Башҡорт теле”Күнегеүҙәр йыйынтығы”нан алынды

**3-сө вариант**

**Хәйерле көн, ҡәҙерле улым минең!**

Һинең моңһоу хатыңды алдым. Һинең Яңы йыл алдынан кисергән уйҙарың мине бер ҙә ғәжәпләндермәне. Ундай уйҙарҙы ҡасандыр мин дә үткәрҙем. Шулай итеп, донъяла кеше нимә өсөн йәшәй, тормоштоң мәғәнәһе нимәлә?

Һәр кешенең бер нисә тормош маҡсаты була. Марсҡа оса торған йыһан карабы төҙөүҙе маҡсат итеп ҡуйғандың да, игендән юғары уңыш үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуйған кешенең дә тормош мәғәнәһе бер : кешеләргә хеҙмәт итеү, кешеләргә яҡшылыҡ эшләү, кешенең камиллашыуға, ижадҡа, матурлыҡҡа булған ынтылышын данлау. Тормош мәғәнәһе – һәр кешенең конкрет маҡсаты түгел, ә тормош принциптары, тормош юлы. Кем кеше хаҡына хеҙмәт итә, ауырлыҡтарҙы еңә, уңыштарына шатлана - тормоштоң мәғәнәһе лә, тормоштоң асылы ла ана шунда.

Хатымды врачтарҙың бик боронғо “Башҡаларға яҡтылыҡ өсөн ян!” тигән девизы менән тамамлайым. Был һүҙҙәрҙең асылын уйла, улым! (В.Сухомлинский) (118 һүҙ)